## Шиғри тулҡында

**Зәйнәб БИИШЕВА,**
**Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы**

*Әсәм әйтә ине: "Фәрештәләр"*
*Таң алдында бәхет өләшә.*
*Егәрлеләр генә үҙ өлөшөн*
*Алыр өсөн тороп өлгәшә.*
*Йоҡосоға өлөш бирмәй улар.*
*Өлөшһөҙҙө һөймәй Алла ла...*
*Таңда йоҡлап ҡалһа, яҙын иртә*
*Сәскә атмаҫ ине алма ла".*
*("Әсә һүҙе - тәңре һүҙе" тиҙәр).*

* * *

**Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА**

**БИРСЕ БЕҘГӘ ИМАН...**

*Эй, Хоҙайым, иман бирһәң ине,*
*Мәрхәмәтлек, тағы сабырлыҡ.*
*Тел ҡеүәһе бир һин кешеләргә,*
*Бер-бер(е)һенең күңелен*
*табырлыҡ.*

*Ошо күктәр, ошо ерҙәр-һыуҙар,*
*Ошо һауа - булған бәрәкәт,*
*Булғанынса ғына була бирһен,*
*Миҙгел-миҙгел барһын хәрәкәт.*

*Эй, Хоҙайым, бирсе беҙгә иман,*
*Мәрхәмәтлек, тағы түҙемдәр.*
*Кәрәк түгел беҙгә хәрәм алма,*
*Кәрәк түгел хәрәм йөҙөмдәр.*
*Хәләл көстө түгеп*
*тапҡан ризыҡ*
*хужа булһын беҙҙең өҫтәлгә.*
*"Бисмилла"лы булһын*
*һәр эшебеҙ,*
*Сауаптарға сауап өҫтәргә.*

*Эй, Хоҙайым, торған еребеҙҙә,*
*Тик изгелек итһен батшалыҡ.*
*Яҡты булһын күңел күктәребеҙ,*
*Хаҡ иманлы булһын бар халыҡ.*

*Тайпылмаһын кеше изгелектән,*
*Тайпылмаһын донъя күсәрҙән.*
*Хәҙистең дә аҫты-өҫкә килә,*
*Өтөрө генә хатта үҙгәрһә.*

# ИҢ ЯҠШЫ ДАУА - ЙЫЛЫ ҺҮҘ

***Шәйех Мөхәммәд Хәсәндең мосолман ир-егетенә өндәшеүе***

Мин Аллаһы Тәғәләнән өйҙәребеҙҙе мөхәббәт һәм мәрхәмәт менән нурландырыуын үтенәм. Ошо үтенесемә бәйләп, һиңә тағы ла бер нәмә тураһында өҫтәп әйткем килә. Әгәр ҙә ҡатының һөйөүендә, яҡшы мөғәмәләңдә, күркәм әҙәбеңдә, холҡоңдон яҡшылығын тойоп йәшәһә, ул һәр саҡ һинең менән буласаҡ һәм һин кисергән бөтөн ауырлыҡтарҙы ла бергә кисерәсәк. Һөйөү, ихлас мөнәсәбәт һәм һәйбәт мөғә-мәлә... Мин элек тә һорағаным бар ине... Әле лә һорайым, ҡатыныңа аҙаҡҡы тапҡыр ҡасан: "Мөхәббәтем минең!" - тип әйттең: "Ул һүҙҙе туйға тиклем әйткәнем", - тигәнеңде лә ишетәм. Ләкин... туйҙан һуң әйтергә онотҡанһың.

Элек тә шулай тип шаяртҡаным бар ине: әгәр ҙә ир ҡатынына шылтыратып: "Әссәләмү-ғәләйкүм, һин ни хәлдә, мөхәббәтем минең?" тип һораһа, ҡатыны ышанмаясаҡ. Ире шылтыратҡанына ышаныр өсөн, хатта телефон номерына ҡабат күҙ һаласаҡ. Шунан ҡабаттан иренә шылтыратып: "Әйт, нимә булды, берәй эш боҙманыңмы, минән йәшереп кенә икенсегә өйләнеп ятмайһыңмы?" тип тә һораясаҡ әле. Иренең: "Һөйөклөм минең", тигәненә ышанмаясаҡ, сөнки ул былдай һүҙҙе ишетеп өйрәнмәгән. Арағыҙҙан кемдер берәү: "Мин ҡатынға наҙлы һүҙҙәр әйтергә ҡыймайым", тип аҡланыр. Әгәр ҙә былдай һүҙҙәрҙе әйтә алмайһың икән, ҡатыныңа мәр-хәмәтле һәм яҡшы мөнәсәбәтендә күрһәтергә тырыш. Шәфҡәтле, хәстәрлекле мөғәмәләң аша яратыуыңды тойһоң. Ул ишетергә теләгән, яратҡан һүҙҙәрен әйт. Уға малыңды сарыф ит һәм йомарт бул. Һаранланма. Шул саҡта ҡатыныңдың йөрәге һиңә мөхәббәт менән тулышыр. Һәм ул бөтөн ҡыйынсылыҡтарҙы һинең менән ҡуша үткәрәсәк һәм ярҙам итәсәк. Мин Аллаһы Тәғәләнән өйҙәребеҙҙе бәхет, һөйөү һәм мәрхәмәт менән тултырыуын һорайым.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әҙерләне.**

# ҠАЙҒЫ ТӨРҘӘРЕ

**Абдурахман АКБЕРДИН**

***Әнәс ибн Мәликтән һөйләнеүенсә, Пәйғәмбәр (саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм) шулай тигән:***

"Ҡиәмәт көнө ошо донъяла ниғмәттәр күргән, ләкин тамуҡ эйәһе булған кешене килтерерҙәр һәм аҙ ғына йәһәннәмгә сумырып алырҙар. Унан: "Эй, Әҙәм балаһы! Һин (был донъяла берәй хәйерле нәмә күрҙеңме? Ниндәйҙер ниғмәт менән ләззәтләндеңме?" - тип һорарҙар. Ул кеше: "Юҡ! Раббым менән ант итәм!" - тип әйтәсәк. Һәм был донъяла иң ҡурҡыныс бәләләр күргән, ләкин йәннәт әһеле булған кешене килтерерҙәр. Уны бер аҙға ғына йәннәткә сумырып алғас: "Эй, Әҙәм балаһы! Һин (был донъяла) берәй бәлә күрҙеңме? Ниндәйҙер ҡыйынлыҡ һинең башыңдан үттеме?" - тип һорарҙар. Ул кеше: "Юҡ! Раббым менән ант итәм, башымдан бер бәлә лә үтмәне, бер ҡыйынлыҡ та күрмәнем" - тип әйтәсәк. (Мөслим риүәйәт иткән).

...Бер көн өс йәшлек ҡыҙымдың үҡһеп-үҡһеп илап ятҡанын күреп ҡалдым. Күҙ йәштәре ятҡан еренә ағып төшкән дә ике арыу ғына тап барлыҡҡа килтергән. Шул тиклем ихлас илауына аптырап:

- Ниңә илай ул? - тип ҡатыным һәм алты йәшлек улымдан һорайым.

"Нимә кәрәк?" - тип ҡыҙыма ла өндәшеп ҡарайым. Ул иһә миңә аңлашылмаған телдә "лыбу" тип нәмәһендер аңлатырға маташа...

- Нимә ул? - тип йәнә ҡатынымдан һорайым.

Ҡыҙым нығыраҡ үпкәләп ҡуймаһын тип, ҡатыным шым ғына миңә ғәрәпсә: "Балыҡ һорай", - ти.

- Ниңә бирмәйһегеҙ һуң? Бирегеҙ! - тим. Бала илағанда ниндәй генә балыҡты йәлләп тораһың инде?

Ҡатыным малайҙан рөхсәт алғандай булып: "Ул Әхмәттеке. Әхмәт, Латифаға балыҡты бирәһеңме?", - ти. Баҡтиһәң, ул ябай ҡатырғаға йәбештерелгән өс пластилин киҫәге икән - Әхмәт балалар баҡсаһында эшләп алып ҡайтҡан.

...Бына беҙ ҙә бит, ҡайһы ваҡыт төшөнкөлөккә бирелеп төндәр буйы уфтана-уфтана уйланған булабыҙ, машинабыҙҙың "үҙебеҙҙеке", "ябай" булыуы, йылы булмауы беҙҙе ҡайғыға һала. Ә төплөрәк уйлап ҡараһаң, күп кешегә ҡиммәтле сит ил арбаһы тик "А" еренән "В" еренә тиҙерәк, йылыраҡ барып етер өсөн, шулай уҡ урамда кешеләрҙең һоҡланған ҡараштарын күреү өсөн генә кәрәк. Ошо йылылыҡ, тиҙлек, кеше һүҙе тип, диванда ҡайғырып ятҡаныбыҙҙа, беҙ Аллаһы Тәғәлә алдында бер өс киҫәк пластилин таптырып ятҡан бәпес һымаҡ күренмәйбеҙ микән?..

## Уйлан

# ЙӨҘҘӘРЕНӘ - НУР,



# КҮҢЕЛДӘРЕНӘ ҠЫУАНЫС БИРЕР...

"Мосолмандар, үҙҙәре мохтажлыҡ кисереп торған хәлдә лә, кешенән ярҙамға өмөт итмәй. Аллаһтың ризалығы өсөн булһын тип, үҙҙәренә үтә лә ҡәҙерле ризыҡтан фәҡирҙәргә, етемдәргә өлөш сығара. "Асыу һәм күңелһеҙлектәр алып килгән Ҡиәмәт көнөндә Раббыбыҙҙың хөкөмөнән ҡурҡабыҙ", - ти улар. Шуның өсөн Аллаһ уларҙы ана шул көндөң бәлә-ҡазаһынан ҡотҡарыр, йөҙҙәренә - нур, күңелдәренә ҡыуаныс бирер". "Әл-Инсан" ("Кеше") сүрәһе, 8-11-се аяттар.

Йомартлыҡ, мохтажлыҡ кисергән һәр кемгә ярҙам итеү - имандың татлы бер емеше, күңелдә урын алған мәрхәмәтшәфҡәттең гүзәл сағылышы. Әммә малды уңға-һулға таратып, исраф итеү ҙә дөрөҫ түгел. Аллаһ биргәндең ҡәҙерен ебәрмәй, бәндәләр менән уртаҡлаша белеү шарт.

"Ҡулыңды елкәңә йәбештереп ҡуйған кеүек һаранланып та барма, йомарт булам тип, саманан да үтеп китмә, - тип өйрәтә Ҡөрьән. - Шулай була ҡалһа, бәндәләр ҙә хупламаҫ, үҙең дә борсолоуҙан ҡотола алмаҫһың". "Әл-Исра" ("Төндәге күсереү") сүрәһе, 29-сы аят.

Донъяның асыуҙан күмелеп китә яҙған мәлдәре бар. "Күрә алмаусанлыҡ һәм дошманлыҡ холоҡтоң тотанаҡһыҙ булыуынан килә, - тип өйрәтә ғалимдар. - Ундай кеше ыҙғыш өсөн сәбәп эҙләп кенә йөрөй. Күп нәмәне дуҫтарса хәл итеү урынына, маһайыусанлығы һәм наҙанлығы сәбәпле, аҙым һайын ыҙғышҡа юл асып ҡына тора". Дин әһелдәре, дини юлбашсылар элек-электән бәндәләргә яҡшылыҡ, игелек, киң күңеллелек кеүек кешелеклелектең сағыу өлгөләрен күрһәтеп килгән, тормош һабаҡтарын тыуыр быуындарға ла ҡалдырып киткән.

"Кешелә киң күңеллелектең булмауы - етешһеҙлектәрҙең насарҙан да насары, үс алыуға ашығып барыу - гонаһтарҙың иң олоһо", - тигән Ғәли хәҙрәт.

Мосолманды Ҡөрьән киң күңеллелеккә әйҙәп кенә тора: "Һеҙҙең аранан күңеле йомарт, малы етерлек булғандар ҡәрҙәштәренә, фәҡирҙәргә, Аллаһ юлында күсенеп йөрөгәндәргә өлөш сығарыуҙан туҡталып ҡалмаһын, бәндәләрҙе ғәфү итһен, бәхилләтә белһен. Аллаһтың үҙегеҙҙе лә ярлыҡауын теләмәйһегеҙме ни? Ул бит ысын мәғәнәһендә - Ярлыҡаусы, Мәрхәмәт-Шәфҡәт эйәһе". "Нур" сүрәһе, 22-се аят.

**(*Сәләх СУҠБАЕВ* менән Нурмөхәмәт НИҒМӘТУЛЛИНДЫҢ "Дин - ул нәсихәт" тигән китабынан).**

# ИМАН БӘХЕТЕ ТУРАҺЫНДА

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд с.ғ.с. Ер йөҙөнә именлек килтереү өсөн ебәрелгән.

Юҡ, Ергә генә түгел, ә барлыҡ ғаләмдәр өсөн Аллаһтың рәхмәте булараҡ күндерелгән, Раббыбыҙҙың иң һөйөклө ҡоло. Уның әхлағы әйтерһең дә йәннәттә тәрбиәләнгән. Шуға ла, үҙен мосолман тип һанаған һәр бәндә уға - пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәдкә с.ғ.с. оҡшарға тырыша, уның сөннәтен, йәғни йәшәү рәүешен ҡулынан килгән тиклем ҡабатларға, тормошҡа ашырырға ашҡына. Сөнки, уның йәшәү рәүеше - эскерһеҙ бер Аллаһҡа ғына хеҙмәт итеү һәм өммәтем, өммәтем тип өҙгөләнеп, кешеләрҙе аҙашыуҙан ҡотҡарырға ынтылыуы. Мөхәммәд с.ғ.с. беҙгә Аллаһы Тәғәлә тарафынан гүзәл әхлаҡ менән килеүсе, бәхетле йәшәү серҙәренә өйрәтеүсе саф әҙәми зат. Бәхетле, үтеп китә торған был донъяла ғына түгел, мәңгелек тормош урыны булған ахирәттә лә уны нисек табырға өйрәтә - Аллаһтың рәхмәтенә илтә торған ғәмәлдәргә беҙҙе өндәй. Ысынлап та, уның (с.ғ.с.) әхлаҡи гүзәллеге хайран ҡалдыра, тик ул өйрәткәндәрҙе үтәп кенә, иман ләззәтен татып була.

Ысын мосолмандар өсөн үҙенсәлекле иман бәхетенең бер төрө булып, үҙендә сабырлыҡ тәрбиәләү һәм башҡаларға ҡарата ла, сабырлыҡ күрһәтеү булып тора. Шулай уҡ, ғәфү итә белеүсе, рәхмәтле һәм рәхимле булыу, тирә яғындағыларға дуҫлыҡ һәм мөхәббәт өләшеү, әлбиттә Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд с.ғ.с. - гә бында ла һис бер мәхлүк тиңләшә алманы.

Әгәр мосолман, үҙенең күңелендә пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд с.ғ.с. өйрәткән сифаттарҙың ихлас сағылышын таба икән, башҡа мосолмандар менән осрашҡан сағында, уларға ҡарата асыҡ күңелле, ихлас иманлы булыуынан ләззәт таба, ғорурлыҡ кисерә һәм үҙе һымаҡ уҡ мосолмандар араһында булыуҙың ифрат ҙур бәхет икәненә инана. Был бәхет, һәм Аллаһҡа буйһонған мосолмандар менән аралашыуҙан килгән ҡәнәғәтлек тойғоһо иман килтергәндәрҙе, ерҙәге - ваҡытлыса тормошта ла оҙатып йөрөй, һәм киләһе мәңгелек йәннәт тормошонда ла һәр ваҡыт улар менән буласаҡ. Сөнки Аллаһ илсеһе беҙгә йәннәткә илтә торған юлды - ислам динен өйрәтте. Өмөтһөҙҙәргә - өмөт, ҡыйырһытылғандарға - яҡлау, дошманлашҡандарға - туғанлашыу, кешеләрҙе дин ҡәрҙәштәре итеп араларына һөйөү һәм ихтирам килтерҙе ул. Һәм быларҙың нәтижәһе - Аллаһ рәхмәте менән, мәңгелек йәннәт. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд с.ғ.с. бер хәҙисендә Йәннәт әһелдәренең әхлаҡи гүзәллеге хаҡында былай ти: ХӘҘИС: ...уларҙың йөрәктәре, әйтерһең дә, бер кешенең йөрәге. Юҡ улар араһында бәхәстәр һәм аңлашмаусанлыҡтар... (Кутуби - Ситта, 14се том, 449.3 бит).

Уларҙың әхлаҡи сафлығы берҙәм, әйтерһең дә, улар барыһы ла бер кеше. (әт-Тәзкирәт аль - Куртуби, 329.579-сы биттәр).

Был һүҙҙәре менән, Мөхәммәд с.ғ.с. беҙҙе йәнә лә, берләшергә, дин ҡәрҙәштәре булып Аллаһ ризалығы өсөн бер-беребеҙҙе һөйөргә өндәй.

Бөйөктәрҙән Бөйөк Аллаһ, йәннәттәге мосолмандарҙың бер үк уйҙа һәм ихлас күңелле булыуҙары хаҡында Ҡөрьәндә әйтә: "Беҙ улар күңелендәге (хөсөтлөк, мәкер) сәнскеләрҙе һурып алдыҡ: улар инде туғанлашып ултырғыстарҙа ҡапма ҡаршы ултырасаҡ". (Хижр (Хижр иле) сүрәһе, 15:47).

Инде, сикһеҙ рәхмәт, мәрхәмәт, шәфҡәт эйәһе Аллаһ Раббыбыҙ, беҙҙең барыбыҙҙы ла Мөхәммәд с.ғ.с.-дең өммәтенән ҡылып, ваҡытлыса донъяла һәм мәңгелек йәшәйеш урыны ахирәттә лә беҙҙе унан айырмаһа ине! Уның менән йәнәшә, өмөтөбөҙ аҡланған хәлдә, яҡты йөҙ менән Аллаһ хозурына ҡайтыуҙарыбыҙ насип булһа ине. Амин!

**Дәүләкән ҡалаһы мәсете яҙмаларынан.**